**Тема: Б.Бикбайҙың тормош юлы һәм ижады.**

Маҡсат. - Башҡорт әҙәбиәтенең күренекле вәкиле, Башҡортостандың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре Баязит Бикбайҙың тормош юлы, ижады менән таныштырыу;
- уҡыусыларҙың һөйләү телмәрен һәм фекерләүен үҫтереү;
- билдәле шағир, яҙыусылар ижадына ҡыҙыҡһыныу тәрбиәләү.

Йыһаз. дәреслек, китаптар күргәҙмәһе, Б.Бикбайға арналған плакат, портрет, магнитофон яҙмаһы, схемалар.

Эпиграф. Һин тормошта ябыҡ яурыныңа
Быуаттарҙы һалып атланың.
( Р.Бикбаев)

Дәрес барышы.

I. Ойоштороу мәле.

Магнитофондан Б.Бикбайҙың «Туған тел» шиғырын тыңлатыу.

Уҡытыусы.

Был кемдең шиғыры? (яуаптар). Эйе, был Б.Бикбайҙың шиғыры. Бөгөн беҙ уның тормош юлы һәм ижады менән тәрәнерәк танышырбыҙ. Баязит Бикбай һеҙгә кем булараҡ билдәле?

(схема 1 менән танышыу)




- Уҡыусылар, һеҙгә аңлайышлы һәм еңелерәк булһын өсөн төрлө йүнәлештә эшләүсе бүлектәргә бүленәйек.

I. Биография бүлеге.

II. Проза бүлеге.

III.Поэзия бүлеге.
IV.Драма бүлеге.
- Кәрәкле китаптар алдығыҙҙа, бер аҙ кәңәшләшеп алғандан һуң өйҙә әҙерләнеп килгән буйынса сығыштарҙы башларбыҙ.
(Ваҡыт бирелә. Һәр уҡыусы һөйләргә тейеш. Төркөмдәр әҙер булыуҙарын белдерә).

1. Биография бүлеге яҙыусының тормош юлы менән таныштыра. Мөһим даталар схемаға теркәлә бара. Төркөмдәге һәр уҡыусы сығып яҙа.
2. Поэзия бүлеге.

1-се уҡыусы. Б.Бикбайҙың шиғырҙар ижад итә башлауы егерменсе йылдар һуңына тура килә. «Үлтерелгән комсомолка» шиғыры, «Үтеп барған көндәр» поэмаһы иң тәүге ижад емештәре.
2-се уҡыусы. Тыуған ер яҙмышына арналған «Ер» поэмаһы үҙенсәлекле булыуы менән айырылып тора.
3-сө уҡыусы. Алдағы синыфтарҙа беҙ авторҙың «Туған тел», «Рус теле» исемле шиғырҙары менән танышҡайныҡ.

3. Проза бүлеге.

1-се уҡыусы.
1936 йылда «Ер» поэмаһы менән бер үк ваҡытта «Ҡарлуғас» драмаһын яҙа. Был әҫәрен ул башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының героик образын тыуҙырыу теләге менән яҙа.
2-се уҡыусы/
Башҡортостандың милли геройы тураһында пьеса яҙырға хыялланған Б.Бикбай «Салауат» драмаһын яҙа. Уны 1940 йылда тамамлай.
3-сө уҡыусы
Халыҡ, ил тормошоноң бороолошо дәүерендә һәр саҡ һиҙгер Бикбай Ватан һуғышы йылдарында «Ватан саҡыра», « Бер ата балалары» тигән пьесалар яҙа. Ә быйылғы уҡыу йылында «Ҡаһым түрә» драмаһын уҡыясаҡбыҙ.

4. Проза бүлеге.

Уҡыусылар повесть һәм романдарынан торған китаптар күргәҙмәһе менән таныштыра.

Уҡытыусы.
Бына беҙ ҡыҫҡаса Баязит Бикбайҙың тормош юлы һәм ижады менән таныштыҡ. Әле уның беҙ бөгөн телгә алмаған әҫәрҙәре бик күп.Шулай уҡ автор үрҙә күрһәтелгәнсә тәржемәсе, публицист булараҡ та билдәле.

- 1978 йылда Баязит Бикбай тураһында иҫтәлектәр китабы донъя күрә. Хәҙер бер нисә иҫтәлектән өҙөктәр уҡыйыҡ.
(Н.Нәжмиҙең «Бөтәһе лә беҙгә ҡалды», М.Кәримдең «Килә яуа» исемле иҫтәлектәренән өҙөк уҡыла.)

Уҡытыусы.

Эйе, Баязит Бикбай үҙенең әҫәрҙәре, ижады менән әҙәбиәтебеҙгә тос өлөш индерҙе. Бөгөнгөгө дәресте Р.Бикбаевтың әҙипте юғалтыу ҡайғыһы кисереп, унын яҡты иҫтәлегенә арналған шиғыры менән тамамлайыҡ.

Балҡып торған көҙгө был ҡара таң  
Килеп керҙе ҡайҙан аҙашып,  
Ҡара таңдың  
Ҡара ҡуйынына  
Ауҙы аҙашым.  
Тәүге ҡарға баҫып, сабый кеүек,  
Йөрөр инең бөгөн һөйөнөп.  
Ҡар өҫтөндә инде һинең эҙ юҡ,  
Ҡар аңтында тупраҡ өйөмө.  
Һин тормошта ябыҡ яурыныңа  
Быуаттарҙы һалып атланың  
Һүҙҙәреңде халҡым һүҙе күреп,  
Анттар кеүек күреп ятланым.

